Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
«Башкирская гимназия № 25» городского округа город Салават
Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ БГ № 25 г.Салавата
________________ Г.Ш. Давлеткулова
Приказ от «31» августа 2018 г. № 388

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

по предмету «Родная (башкирская) литература»
уровень образования: основное общее образование
срок реализации: 5 лет
количество часов в неделю:
5 кл. – 2 ч., 6 кл. – 2 ч., 7 кл. – 1 ч., 8кл. – 1ч., 9 кл. – 1ч.

Программа составлена на основе «Примерные образовательные программы по предмету "Башкирская литература" для 5-11 классов общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения. Автор Юльмухаметов М.Б. –Уфа: «Китап», 2017.
УМК: Башкирская литература. Учебное пособие для 5 класса общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения. Идельбаев М.Х., Юлмухаметов М.Б., Сулейманов А.М., Казыева З.И. – Уфа, Китап, 2017. Для 6 класса Юлмухаметов М.Б., Идельбаев М.Х., Сулейманов А.М., Казыева З.И.– Уфа, Китап, 2017. Для 8 класса. Юлмухаметов М.Б., Идельбаев М.Х., - Уфа, Китап, 2017. Для 9 класса. Кунафин Г.С., Идельбаев М.Х., - Уфа, Китап, 2017.

Авторы-составители: МО учителей башкирского языка и литературы

СОГЛАСОВАНО
Протокол заседания МО учителей башкирского языка и литературы
от «24» августа 2018 г. №1

СОГЛАСОВАНО
Заместитель директора по УВР
_____________ Д.Ш.Исламгулова
«30» августа 2018 г.

Салават
2018

## I.ПЛАНЛАШТЫРЫЛҒАН ҺӨҘӨМТӘЛӘР

Төп дөйөм белем биреү мәктәбенең 5-9 класс уҡыусыларының башҡорт әҙәбиәте программаһын үҙләштереүҙә һөҙөмтәләр булып түбәндәгеләр тора:

шәхси һөҙөмтәләр:

- башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә башҡорт теленең роле, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
- башҡорт әҙәбиәтенең эстетик ҡиммәтен аңлау;
- башҡорт әҙәбиәтенә ҡарата ихтирам, бай әҙәби мираҫыбыҙға ҡарата ҡыҙыҡһыныу һәм уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү;
- аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасын эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү;
- үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Башҡорт әҙәбиәте буйынса уҡыу программаһын үҙләштереүҙең метапредмет һөҙөмтәләре.

Телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

- аудирование һәм уҡыу:
- телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
- төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү), төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; төрлө төрҙәге аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);
- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәләрен булдырыу;
- һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;
- стилистик үҙенселектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу; һөйләү һәм яҙыу;

- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеген, хәрәкәттең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;

- тыңлаған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;

- төрлө стилдә һәм жанрҙа, адресланыуға ҡарап һәм аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;

- телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;

- ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау; телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу; уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү; алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; башҡорт теленән башҡа фәндәрҙә белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуациялаҙа телмәр этикетының милли- мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

Предмет һөҙөмтәләре:

- башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

- гуманитар фәндәр системаһында башҡорт әҙәбиәтенең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;

- башҡорт әҙәбиәте тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү;

- әҙәбиәт ғилеменең төп аңлатмалары, уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәби тел;

- башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;

- башҡорт теленең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

*9-сы класты тамамлағанда уҡыусылар белергә тейеш:*

- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен, мәғәнәһен;
- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең төп темаһын, композицион үҙенсәлектәрен;
- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең ваҡиғаһын (сюжетын) һәм геройҙарын (геройҙар һәм ваҡиғаларҙың үҙ-ара бәйләнешен);
- әҫәрҙең художестволы образы, темаһы, идеяһы, сюжеты, композицияһы, рифма хаҡындағы төшөнсәләрҙең билдәләре;
- драматик һәм лиро-эпик әҫәрҙәрҙең характерлы үҙенсәлектәре;
- программа тарафынан ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙең текстары.

Уҡыусылар түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш:

1-се төр күнекмәләр:

- яҙыусы һүрәтләгән художестволы картиналарҙы уй менән күҙ алдына баҫтырыу;
- художестволы әҫәрҙәрҙе, фәнни һәм публицистика әҫәрҙәрен айыра белеү;
- өйрәнелә торған әҫәрҙәрҙең сюжет элементтарының, композицияның (автор ҡылыҡһырламаһы, геройҙарҙың эше, ҡылыҡтары һәм портретының, пейзаж һәм интерьерҙың) идея-художество урынын билдәләү;
- контекст эсендә һүрәтләү сараларының идея-художество урынын билдәләү;
- уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау ярҙамында геройға ҡылыҡһырлама биреү;
- авторҙың мөнәсәбәтен билдәләү маҡсатында геройҙарҙы үҙ-ара сағыштырыу;
- эпик, лирик, лиро-эпик һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.

2-се төр күнекмәләр:

- художестволы әҫәрҙәрҙе, фәнни-популяр һәм публицистик текстарҙы тасуири, дөрөҫ, етеҙ итеп ҡысҡырып уҡыу;
- эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен яҙма рәүештә (телдән) тулы итеп йәки һайлап, ҡыҫҡартып һөйләп биреү (изложение төҙөү);
- өйрәнелгән әҫәр буйынса телдән йәки яҙма рәүештә фекерләү характерындағы инша яҙыу;
- һорауҙарға тулы яуап һәм геройҙарға (индивидуаль һәм сағыштырма) баһалама биреү;
- эпик әҫәргә йәки уның өҙөгөнә план төҙөү;

- үҙ аллы уҡылған әҙәби сәнғәт әҫәрҙәренә (әҫәрҙәге герой һәм ваҡиғаларға ҡарата үҙ мөнәсәбәтеңде белдереп) яҙма йәки телдән баһалама бирә белеү.

Әҙәбиәт буйынса уҡыусы белемен баһалауҙың төрлө юлдары һәм үҙенсәлектәре бар. Исеменән үк күренеүенсә, әҙәбиәт дәресе уҡыусыларҙы әҙәпкә, тәртипкә, кешелеклелеккә өйрәтеү менән бергә матурҙы йәмһеҙҙән, яҡшыны насарҙан айырырға ла күнекмә бирә. Тимәк, һәр әҙәбиәт дәресе уҡыусыға тәьҫир итерлек, һоҡланып ултырырлыҡ та булырға тейеш. Шуның менән бергә һәр әҙәбиәт дәресендә тиерлек уҡыусы белеме лә баһаланырға, сиреккә, йыллыҡҡа билдәләр ҡуйылырға бурыслы. Әҙәбиәт дәрестәрендә баһалар ҡуйылыу мөмкинлектәре, юлдары төрлө булырға мөмкин.

Уҡыу тиҙлеген тикшереү.

Башланғыс кластарҙан алып, һәр бала билдәле бер кимәлдә, тиҙлектә шыма итеп уҡый белергә лә бурыслы. Ғөмүмән, етеҙ, дөрөҫ, тасуири уҡыу, уҡырға өйрәтеү әҙәбиәт дәрестәренең тәүге мөһим талаптарының береһе. Уны, йәғни уҡыу тиҙлеген, 1 бала минутына күпме һүҙ укыуына ҡарап билдәләйҙәр. Түбәндә башланғыс кластарҙан алып, уҡыусы минутына күпме һүҙ уҡырға тейеш булған һандар килтерелә. Уларға ҡарап, уҡыу тиҙлегенә ниндәй талаптар ҡуйылғанын билдәләргә мөмкин.

| Билдәләр / Класс | «5» | «4» | «3» | «2» |
|---|---|---|---|---|
| V | 100 | 90 | 80 | 80-дән кәмерәк |
| VI | 110 | 100 | 90 | 90 -дан кәмерәк |
| VII | 120 | 110 | 100 | 100 -ҙән кәмерәк |
| VIII | 130 | 120 | 110 | 110-дан кәмерәк |
| IX | 140 | 130 | 120 | 120-нән кәмерәк |

Белемдәрҙе тикшереү өсөн төп контроль эштәр төрҙәре: тест, телдән яуаптар, контроль эштәр.

Телдән биргән яуаптарҙы билдәләү нормалары:

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, уҡыусыларҙан яуап алыу, уларҙың башҡорт әҙәбиәте буйынса белемдәрен, белеүҙәрен һәм күнекмәләрен тикшереү, иҫәпкә алыу, шуның менән бергә, алған белемдәргә таянып, әҙәбиәт теорияһы күренештәренә аңлатма бирергә өйрәтеү алымдарының береһе иҫәпләнә.

Уҡыусының яуабын баһалағанда, түбәндәге критерийҙар менән эш ителергә тейеш:

1) яуаптың тулы һәм дөрөҫ булыуы;

2) үтелгәнде аңлы үҙләштереү, аңлау кимәле;

3) яуаптың телмәр төҙөлөшө, әҙәби тел нормаларына ярашлы булыуы.

Уҡыусының телдән биргән яуабы үтелгән материалдың уҡытыусы тәҡдим иткән өлөшөнә логик эҙмә-эҙлекле аңлатманы эсенә алған бәйләнешле телмәр булырға, яуап биреүсе баланың өйрәнелгән әҫәрҙәргә, билдәләмәләргә таянып эш итә белеүен күрһәтергә тейеш.

5-се класс өсөн йомғаҡлау контроль эше (тест).

1. «Ҡамыр батыр» әкиәте әкиәттәрҙең ниндәй төрөнә ҡарай?

а) батырҙар тураһында; в) тормош-көнкүреш әкиәттәре

б) хайуандар тураһында; г) тылсымлы әкиәттәр

2. «Әминбәк» әкиәте ниндәй төргә ҡарай?

а) батырҙар тураһында; в) тормош-көнкүреш әкиәттәре

б) хайуандар тураһында; г) тылсымлы әкиәттәр

3. Был өҙөк ниндәй әкиәттән алынған?

«Егеттәр өсәүләп китеп барғандар. Бара торғас бер тугайлыҡҡа барып еткәндәр. Туғайлыҡта бик күп күлдәр ялтырап ята. Ә шул күлдәр араһында бер егет йөрөй. Ул бер нисә күлде бергә уртлап ала ла икенсе бер урынға илтеп ҡоя икән. Батырҙар был ғәжәп егеткә, хөрмәт менән баш эйеп, сәләм биргәндәр…»

а) «Әминбәк» в) «Аҡъял батыр»

б) «Ҡамыр батыр» г) «Ҡәмән менән Сэмән, картуф сәскән Сәлмән»

4. Муйыны дуға – арҡаһы эйәр. Был йомаҡ ниндәй төркөмгә ҡарай?

а) Фән-техника тураһында в) Хайуандар тураһында

б) Тәбиғәт тураһында г) Хеҙмәт тураһында

5. «Урманда» хикәйәһенең авторы кем?

а) К.Кинйәбулатова в) Ғ. Рамазанов

б) А . Карнай г) Р. Ниғмәти

6. “…Эй алйот, ҡыҫҡанға былтыр, ҡысҡыралармы быйыл!” Был юлдар кемдең әҫәренән?

а) М.Кәрим в) Ғ.Туҡай

б) Р.Ниғмәти г) М.Ғафури

7. Түбәндәге өҙөк ниндәй әҫәрҙән: “…Кирәмәт башына менеү – бөркөт осор бейеклеккә күтәрелеү тигән һүҙ ул. Төндәрен уның өҫтөндә, - ти Шәрифулла, - усаҡ тирәһендә әйләнгән күбәләктәр төҫлө, йондоҙҙар һикерешеп уйнай. Улар түбән үк төшәләр – үрел дә тот үҙҙәрен! Ҡайһы бер шуҡтары, яңылыш ҡаяға һуғылып, селпәрәмә лә киләләр. Ана шуны инде йондоҙ атылыу тиҙәр.

а) М.Кәрим “Өс таған” в) А.Карнай “Урманда”

б) Р.Ниғмәти “Хәйерле юл” г) Д.Юлтый “Бәләкәй Ҡотош”

8. “Һарыҡты кем ашаған?” мәҫәлененң авторы кем?

а) М.Кәрим в) Ғ.Туҡай

б) Р.Ниғмәти г) М.Ғафури

9. “Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы” исеме иң беренсе булып кемгә бирелгән?

а) М.Кәрим б) Р.Ниғмәти в) Ғ.Туҡай г) М.Ғафури

10. Беҙҙең республикала балалар өсөн ниндәй гәзит-журналдар баҫыла? (һанап сыҡ)

6-сы класс өсөн йомғаҡлау контроль эше (тест).

1. Ҡобайырҙар, әкиәттәр ниндәй сәнғәт төрөнә ҡарай?

а) Биҙәү сәнғәте.б) Бейеү сәнғәте. в) Һүҙ сәнғәте.

2. Тереһыу тураһында ниндәй әкиәттә әйтелә?

а) “Урал батыр”.б) “Аҡъял батыр”. в) “Ҡамыр батыр”.

3. Ф. Чанышеваның “Икмәк еҫе” шиғырында ҡайһы осор сағылдырыла?

а) Бала сағы. б) Үҫмер сағы. в) Йәшлек йылдары.

4. “Йософ ҡиссаһы” әҫәрен кем яҙған?

а) Ҡашғари. б) Ҡол Ғәли. в) Сәйф Сараи.

5. “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай” әҫәренең авторы кем?

а) Н. Ғәлимов. б) Ҡ. Аралбай. в)А. Игебаев.

6. “Ҡәнәфер сәскәһе” әҫәре ниндәй жанрға ҡарай?

а) Әкиәт. б) Повесть. в) Хикәйә.

7. “Бөрөкөт һауала үлә” әҫәрендә күкрәге менән амбразураны ҡаплаусы егет кем ул?

а) Матросов. б) Артюхов. в) Лалетин.

8. Әҫәрҙә Шәкирйән үҙ исемен нисек үҙгәртә?

а) А. Матросов. б) Г. Тарасов. в) А. Петров.

9. “Шүрәле” әҫәренең авторы кем?

а) Ш. Бабич. б) Ғ. Туҡай. в) Ҡ. Даян

10. Кешегә, йән эйәләренә хас һыҙаттарҙы йәнһеҙ предметтарға һәм күренештәргә күсереү нимә тип атала?

а) Сағыштырыу. б) Һүрәтләү. в) Йәнләндереү.

7-се класс өсөн йомғаҡлау контроль эше (тест).

1. М. Аҡмулланың аң-белемгә өндәгән шиғыры нисек атала?

1) “Дуҫлыҡ”  2) “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!”   3) “Бәхет”

2. Шиғыр юлдары аҙағындағы өндәр оҡшашлығы нисек атала?

1) ритм  2) рифма   3) строфа

3. М.Ғафури ҡасан тыуған?

1) 1880   2) 1895   3) 1900

4. М.Ғафури иң аҙаҡтан ниндәй мәҙрәсәне тамамлай?

1) Рәсүлиә  2) Ғосмания   3) Ғәлиә

5. Бер аҙым алға баҫам да

Әйләнәм мин артыма. Был юлдар М. Ғафуриҙың ҡайһы шиғырынан алынған?

1)“Мин ҡайҙа”  2) “Үҙем һәм халҡым”   3) “Гөлдәр баҡсаһында”

6. Егерме дүрт йыл  ғына йәшәгән башҡорт шағиры кем?

1) С. Юлаев   2) М.Ғафури   3) Ш.Бабич

7.Д.Юлтыйҙың “Тимеркәй фәлсәфәһе” ндә Тимеркәй кемдең күҙҙәрен алыҫ йондоҙҙарға оҡшата?

1) Атаһының   2) Әсәһенең   3) Күрше ҡыҙы Гөлбикәнең

8. Сәми ҡарт ниндәй эш башҡарған?

1) ауылда эшләгән  2) урман ҡарауыллаған   3) батрак булған

9. Етем ҡалғас, Тимеркәй кем ҡулына барып эләгә?

1) Ҡамышбикәгә   2) Никлудин баярына   3) Ҡотлоярға

10. Тимеркәйҙең яҙмышы нисек тамамлана?

1) ауылына ҡайта  2) һуғышта үлеп ҡала.

11. “ Айбикә” повесы ҡасан баҫыла?

1) 1926   2) 1931   3) 1934

12.”Айбикә” повесындағы Айбикәнең ире кем?

1) Юлдыбай   2) Ҡотлояр.

13. Колхозға ингәс, Айбикә ниндәй һөнәр ала?

1) һауынсы  2) уҡытыусы   3) тракторсы

14. Ҡотлояр ҡулына Айбикә ҡасан килеп эләгә?

1) аслыҡ йылында   2) Юлдыбай һуғышҡа киткәс

15. Айбикәгә Ҡотлояр ҡулынан ҡотолорға кемдәр ярҙам итә?

1) Алмаҡай менән Хәҙисә;  2) Ғәйшә;  3) Юлдыбай

8-се класс өсөн йомғаҡлау контроль эше (тест).

1. Әҫәрҙәге   әл-ваҡиғаларҙың,   күренештәрҙең   һәм   уй-тойғоларҙың образлы ойошторолоу формаһы нисек атала:

а) төйөнләнеү;  б) сюжет;  в) ваҡиғалар үҫеше    г) композиция?

2.   Башҡорт восстаниелары етәксеһе булмаған шәхесте күрһәтергә:

а) Алдар Иҫәнгилдин;   б) Кинйә Арыҫланов;  в) Ғәфиәт Арыҫланов;    г) Баҙарғол Юнаев?

3.   Риүәйәттән легенда нимһе менән айырыла?

а) Фантастик элементтарҙың киң урын алыуы менән;                б) Йырҙарҙың тарихын һөйләүе менән;

в) Ер-һыу атамаларының килеп сығыуын аңлатыуы менән;   г) Образдар системаһы менән?

4.       Салауат Юлаевтың ниндәй шиғырынан өҙөк тәҡдим ителгән:

Шул бөркөттәй, егет, батыр бул, тайғаныңда таян дуҫтарға.

Яуҙа арыҫландай ажғырып, йән аямай ташлан дошманға.

а) «Егеткә»;    б) «Һандуғас»;     в) «Уҡ»;     г) «Тирмәмдә»?

5.      Б.Рафиҡовтың «Эйәрләнгән ат» әҫәренең жанры:

а) хикәйә;             б) повесть;           в) роман;            г) тарихи фараз?

6. Шәхес  культы  йылдары  фажиғәһен   Р.Ғарипов  ҡайһы  әҫәрендә сағылдыра:

а) « Туған тел»; б) «Аманат»; в) «Табыныу»; г) «Уйҙарым»?

7. Әхмәт Ғ.Сәләмдең ҡайһы әҫәре геройы:

а) «Һәйкәл»; б) « Шоңҡар»; в) « Ғүмер»; г) «Республика иртәһе»?

8. Р. Бикбаев ҡайһы әҫәрендә тыуған тәбиғәтте һаҡлау, яҡлау мәсьәләһен күтәрә:

а) «Йүкәләрҙән һығылып бал тама»; б) « Ғүмер уртаһы»; в) «Халҡыма хат»?

9. М. Кәримдең 1938 йылда баҫылып сыҡҡан тәүге китабы нисек атала?

а) «Отряд ҡуҙғалды»; б) «Таныш булмаған ҡунаҡ»; в) «Яҙғы тауыштар»; г) « Ҡайтыу»?

10. Әбйәлил районында тыуған сәсәнде билдәләгеҙ:

а) Мөхәмтша Буранғолов; б) Фәррәх Дәүләтшин; б) Шафиҡ Әминев-Тамъяни сәсән;

11. Беҙҙең көндәргә килеп еткән әйтеш авторҙарын билдәләгеҙ:

а) Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсән; б) Иҙеүкәй менән Мораҙым; в) Ерәнсә сәсән менән Ҡарас сәсән.

12. Б. Бикбай ҡайһы ауылда тыуған:

а) Диңгеҙбай; б) Хәсән; в) Үрге Ильяс; г) Ҡалта?

13. М. Кәримдең «Үлмәҫбай» әҫәренең жанры:

а) роман; б) поэма; в) драма; г) комедия?

9-сы класс өсөн йомғаҡлау контроль эше (тест).

1. Яҙыусы тыуған ер (тура килтереп яҙ)

| | |
|---|---|
| 1. Абдулҡадир Инан | А. Ҡырмыҫҡалы р-ны, Ибраһим ауылы |
| 2. М.Аҡмулла | Б. Миәкә р-ны, Илсеғол |
| 3. М.Өмөтбаев | В. Миәкә р-ны,Туҡһанбай |
| 4. С.Яҡшығолов | Г. Һамар губ, Кисеүсат |

5. Р.Фәхретдинов Д. Силәбе өлкәһе, Шығай

2. Был һүҙҙәрҙе кем әйткән?

«Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе – үҙеңдең сығышыңды, йәғни шәжәрәңде белеү, икенсеһе – йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу, һәм өсөнсөһө - тарихи өләңдәрҙе, йырҙарҙы белеү».

3. Был һүҙҙәрҙе кем әйткән?

Мин хәҙер өс нәмәгә иманам. Беренсеһе – ислам дине, икенсеһе – ғилем, өсөнсөһө - бөйөк төрөк милләте.

4. Был һүҙҙәрҙе кем әйткән?

Әҙип һәм ғалимдары булмаған ҡәүем — бәхетһеҙ, мәшһүр кешеләре булмаған халыҡ — яҡлаусыһыҙ, әҙәбиәте булмаған – рухһыҙ.

5. Был һүҙҙәрҙе кем әйткән?

Әҙәми зат ни ҡылһа ла – үҙе өсөн,

Яманлыҡ ҡылһаң, ахыры бер сәсәрһең.

6. Был һүҙҙәрҙе кем әйткән?

Бына йәштәр! Һеҙгә алтын кәңәш бар: Бойоҡмағыҙ, еребеҙ ҡалды, тип тар, Ҡырағайлыҡтан, наҙанлыҡтан ҡасығыҙ, Уҡырға төрлө мәктәптәр асығыҙ.

7. Был герой кемдең әҫәренән?

1. Әсмә 2. Тимербай 3. Шиһабетдин Мәржәни 4. Ҡайыш 5. Йоҡлап ятҡан башҡорт

8. Был әҫәрҙең авторы кем?

1. «Аҫар»
2. «Салауат батыр»
3. «Башҡорт хәлдәре»
4. «Инсафлыҡ»

5. «Йәдкәр»

9. Төшөнсәләрҙе тура килтер:

| | |
|---|---|
| 1. Кадет корпусын тамамлаған | А. Абдулҡадир Инан |
| 2. Анкара университеты профессоры | Б. М.Аҡмулла |
| 3. Диниә назаратында мөфтөй | В. М.Өмөтбаев |
| 4. Ил гиҙеүсе сәсән-шағир | Г. Р.Фәхретдинов |

## II. УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Программа буйынса башҡорт  әҙәбиәтен өйрәтеүҙең маҡсаттары һәм бурыстары:

- башҡорт әҙәбиәте дәрестәре аша яңы шарттарҙа гармоник үҫешкән яңы шәхес тәрбиәләү;

- уҡыусыларҙы нәфис әҙәбиәт менән таныштырыу барышында замандың рухи тормошона яҡынайтыу, әҙәбиәт, сәнғәткә ылыҡтырыу юлы менән дөйөм мәҙәни кимәлен күтәреү;

- урта звено уҡыусыһының йәш үҙенсәлектәренә бәйле  эстетик зауыҡ, нәфис әҙәбиәт аша ватансылыҡ, юғары гражданлыҡ позицияһы тәрбиәләү;

- әҙәбиәт теорияһы, тарихы аша донъяға, ил, халыҡ яҙмышына фәнни ҡараш формалаштырыу, фекерләү, бәйләнешле телмәр үҫтереү, ижади үҙаллылыҡ тәрбиәләү;

- ауыҙ-тел һәм хәҙерге әҙәбиәт әҫәрҙәренә ихтирам, ҡыҙыҡһыныу, китап уҡыуға ынтылыш  тәрбиәләү;

- уҡыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыу өҫтөндә эшләү;

- уҡылған әҫәрҙе аңлы ҡабул итеү, уның буйынса фекер йөрөтөү һәләтен үҫтереү өсөн тексҡа яҡын һөйләтеү.

Уҡыу предметына дөйөм характеристика.

Коммуникатив компетенция  телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә. Коммуникатив компетенция  аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

Мәҙәни компетенция туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма буларак аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли-мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нормаларын үҙләштереүҙе, халыҡ-ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереү; милли мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.

Башҡорт әҙәбиәте курсының коммуникатив-эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргә йүнәлтеү кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәләтле һәм унда әүҙем эшмәкәрлете дауам итеүгә һәләтле буларак, функциональ грамоталыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

5-СЕ КЛАСС

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | Белем бар байлыҡтан да артыҡ. | Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимны. М.Ғафури «Нурлы мәктәп». Р.Ниғмәти «Хәйерле юл, һеҙгә!» Р.Байбулатов «Ағас һәйкәл». Р. Фәхретдин «Белем». | 4 |
| 2 | Уҡытыусы – ул ҙур исем. | М.Кәрим «Уҡытыусыма». Н.Нәжми «Беренсе дәрес». Лира Яҡшыбаева. «Бәхетең үҙең менән». | 3 |
| 3 | Килеп етте көҙҙөң алтыны… | Д.Юлтый. «Көҙ». Али Карнай «Урманда». Ғ.Рамазанов. «Ураҡ өҫтө». Ф.Аҡбулатова «Атай икмәге». | 5 |
| 4 | Күңел күрке – тел. | Ҡ.Аралбай. «Башҡорт теле». Б.Бикбай «Туған тел», «Рус теле». Р.Ғарипов. «Туған тел». Х.Тапаҡов «Бибинур «улуәсәй». | 4 |
| 5 | Китап – юл күрһәтеүсе йондоҙ. | М.Ғафури. «Балалар һәм китап». Д.Бүләков. «Яралы китап». Я.Ҡолмой. «Ҡыҙыҡлы китап». Н.Иҙелбай. «Иң яҡын дуҫ». | 6 |
| 6 | Халыҡ әйтһә – хаҡ әйтә. | Башҡорт халыҡ ижады. «Алпамыша». «Әминбәк». «Ҡәмән менән Сәлмән, картуф сәскән Сәлмән». (әкиәттәр). Йомаҡтар. Мәҡәлдәрҙә – халыҡ аҡылы. Көләмәстәр. | 12 |
| 7 | Боронғонан аманат. | Салауат Юлаев. «Ҡайтып киләм». Ғ.Усман. «Егет булһаң». «Ҡармасан менән | 2 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | Сәрмәсән» («Һуңғы һартай» әçәренән өҙөк).<br>С.Яҡшығолов. «Дим буйында яҙғы таң», Я.Юмаев «Шәкерт». | |
| 8 | Килеп етте ҡыштың һыуығы… | Н.Нәжми. «Беренсе ҡар». Г.Юнысова. «Ҡотло булһын Яңы йыл».<br>С.Сурина «Ҡышты ҡаршылағанда». | 3 |
| 9 | Башҡортостан – тыуған төйәгем | Р.Ғарипов. «Башҡортостан». И.Кинйәбулатов. «Дуçлыҡ төйәге».<br>М.Кәрим. «Өс таған» повесынан өҙөк. | 6 |
| 10 | Уралҡайҙы һөймәç тә йән булмаç. | Р.Шәкүр. «Урал батыр иле - сал Урал».<br>Р.Ниғмәти. «Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар». А.Йәғәфәрова. «Урал иле». | 3 |
| 11 | Изгеләрҙән-изге әсәйҙәр. | К.Кинйәбулатова. «Әсә күңеле». Х.Назар. «Таҡта сәй». Ғ.Вәлиев. «Әсәйем фатихаһы». | 3 |
| 12 | Яҙ килә, яҙ! | Д.Бүләков «Яҙғы ташҡын менән килгән бәхет». («Эçе ҡар» пов. өҙөк)<br>Ш.Бикҡол «Яҙғы уйҙар» | 4 |
| 13 | Бер кем дә, бер нәмә лә онотолмай. | «Еңеүселәргә дан!» Й.Мостафин. «Ыласын». М.Кәрим. «Билдәһеҙ һалдат».<br>Т.Ғиниәтуллин. «Миҙал». | 4 |
| 14 | Тәбиғәт ҡосағында. | Р.Ғарипов. «Һабантурғай». А.Карнай. «Турғай». З.Хисмәтуллин. «Урман ҡунағы».<br>Т.Йосопов. «Ерән ҡашҡа». С.Агиш. «Турыҡай». | 6 |
| 15 | Йәмле йәй килде. | Ф.Иçәнғолов. «Хәмит күпере». А.Игебаев. «Һыу буйында балыҡсы». М.Әбсәләмов. «Йомағужа тирәктәре». | 3 |
| 16 | Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте. | М.Йәлил. «Йырҙарым». Дәрдмәнд. «Нурый менән Зәйнәб», «Бер хазина». | 1 |

6-СЫ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | Алтын һуҡмаҡ. | Башҡортостан Республикаһының Дәүләт флагы. Ф.Ғөбәйҙуллина, «Башҡортостан флагы» шиғыры. | 3 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | С.Әлибаев, «Мәктәп юлы», Я.Вәлиев, «Беренсе көн», Я.Ҡолмой, «Мәктәп», Р.Фәхретдин, «Мәктәп». | |
| 2 | Уйҙың күрке - тел, телдең күрке - һүҙ. | З.Биишева, «Башҡорт теле», Ҡ.Аралбай, «Башҡорт ҡоролтайына», Р.Бикбаев, «Халҡыма хат». | 2 |
| 3 | Ил ҡеүәте –икмәктә. | Г.Юнысова, «Ер улына», Д.Бүләков, «Ҡара икмәк», Ф.Чанышева, «Икмәк еҫе». Хикәйәләү тураһында. Ә.Вахитов, «Өс бөртөк бойҙай». | 7 |
| 4 | Халыҡ һүҙен ташлама. | «Урал батыр» әкиәте. Батырҙар тураһында әкиәттәр. «Ҡариҙел» легендаһы. Легенда тураһында. Бәйеттәр. Таҡмаҡтар. | 8 |
| 5 | Уҡытыусы! Ошо исемдән дә юғарыраҡ ниндәй исем бар?! | К.Кинйәбулатова «Уҡытыусым», Л.Яҡшыбаева, «Уҡытыусы - ул белем биреүсе лә,икенсе әсәй ҙә…», Р.Шаммас, «Уҡытыусыға», Ф.Иҫәнғолов, «Уҡытыусы Ғүмәров». | 5 |
| 6 | Беҙҙең боронғо әҙәбиәтебеҙ. | Ҡол Ғәли, «Йософ ҡиссаһы»нан өҙөк. Шәжәрә тураһында. Табын ҡәбиләһенең Ҡара Табын ырыуы шәжәрәһе.Сәйф Сараи, «Парсалар». | 4 |
| 7 | Батырҙарҙы яуҙа күп күрҙек, Салауаттай батыр юҡ икән… | Т.Йосопов, «Ай Уралым,Уралым», Н.Иҙелбай, «Салауат ташы», Ж.Кейекбаев, «Урал тураһында ҡобайыр». Н.Иҙелбай, «Зөлхизә».<br>С.Юлаев, «Ағиҙелкәй аға ҡая аралап», «Йырҙарҙан», "Юлай менән Салауат" (эпостан өҙөк), Мирас Иҙелбаев, «Төш» («Юлай улы Салауат» китабынан), Рәми Ғарипов, «Салауат батыр». | 11 |
| 8 | Башҡортостан - гөлбостан. | Ш.Бабич, «Башҡортостан», Ялыҡ Бурнаҡ улы ("Һуңғы һартай " әҫәренән өҙөк), З.Биишева, Н.Нәжми, «Башҡортостан». | 3 |
| 9 | Һыҙҙырт,ҡурай,башҡорт моңдарын… | "Ҡурай" (Башҡорт халыҡ йыры), Нур Ғәлимов, "Яуҙан ҡайтҡан ҡурай", Ҡәҙим Аралбай, «Йомабай ҡурайы". | 3 |
| 10 | Әсәй күңеле – тулы ҡояш . | А.Игебаев "Әсәйемә", Й.Солтанов, "Ҡәнәфер сәскәһе", Р. Ғарипов, "Әсәм ҡулдары", "Бер әсәнең зарыҡҡаны" әкиәте. | 4 |
| 11 | Яуҙа еңеп ҡайтығыҙ. | "Шайморатов генерал" йыры, Ә.Бикчәнтәев, "Бөркөт һауала үлә" (өҙөк). Батыр үлһә, | 7 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | даны ҡала. Т.Килмөхәмәтов, “Турайғыр”. Кластан тыш уҡыу. Т.Сәғитов, “Аманат”. Телмәр үҫтереү. “Ир ҡанаты ат була”. | |
| 12 | Тәбиғәт донъяһында. | Г.Юнысова, “Талы бөгөлөп тора”, Ф.Ғөбәйҙуллина, “Умырзая”, А.Игебаев, “Сыйырсығым”, Р.Назаров, “Офоҡтағы ҡояш”, С.Яҡупов, “Ҡарабаш турғай”. | 4 |
| 13 | Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте. | Ғ.Туҡай, “Шүрәле”. Халыҡ ижады һәм әҙәбиәт. В.Бианки, “Ҡоторған тейен”, И.Йосопов, “Ҡара бүрек хаҡында һүҙ”. | 4 |
| 14 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау (3 сәғәт). | 3 |

7-СЕ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | Туған телем. | И.Кинйәбулатов. «Ҙур ышаныс һеҙгә, уҡытыусы!». Ә.Әминев «Инша». Р.Ғарипов. «Тел». Р.Ғамзатов «Туған тел». | 2 |
| 2 | Башҡорт халыҡ ижады. | Йырҙар, риүәйәттәр, сеңләүҙәр.<br>Тарихи ваҡиғалар, хәрби поход, һуғыш тураһындағы йырҙар һәм риүәйәттәр.<br>Баструкка йәки һөргөнгә ебәрелгән кешеләр тураһындағы йырҙар һәм риүәйәттәр.<br>Түрәләр тураһындағы йырҙар: «Ҡолой кантон», «Абдулла ахун», «Тәфтиләү».<br>Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы, тәбиғәт тураһындағы йырҙар һәм риүәйәттәр: «Зөлхизә», «Ғилмияза», «Таштуғай». Тарихи йырҙар - халыҡ күңеленең көҙгөһө.<br>Сеңләүҙәрҙә башҡорт ҡатын-ҡыҙының ауыр яҙмышы. «Ерәнсә сәсән» әкиәте. | 6 |
| 3 | В.Зефиров | «Йәнтүрә хикәйәһе». | 1 |
| 4 | М.Аҡмулла. | М.Аҡмулланың тормош юлы. М.Аҡмулла шиғырҙары.<br>Аҡмулла шиғырҙарында мораль-этик проблемалар. | 2 |
| 5 | М.Ғафури. | М.Ғафуриҙың тормош юлы. «Үҙем һәм халҡым», «Мин ҡайҙа», «Гөлдәр баҡсаһында» шиғырҙары. Кластан тыш уҡыу. М.Ғафури. «Тормош баҫҡыстары». | 2 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 6 | Мамин - Сибиряк | «Һунарсы ҡарт». | 1 |
| 7 | Ш.Бабич. | Ш.Бабичтың тормош юлы. Ш.Бабичтың шиғырҙары. Идея-тематик йөкмәткеһе. | 2 |
| 8 | Д.Юлтый. | Д.Юлтыйҙың тормош юлы. «Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһе.<br>Әҫәрҙә ябай кешенең фажиғәле яҙмышын сағылдырыу. | 2 |
| 9 | Һ.Дәүләтшина. | Һ.Дәүләтшинаның тормош юлы. «Айбикә» повесы. Идея- тематик йөкмәткеһе.<br>"Һырға һабағы" хикәйәһе. | 3 |
| 10 | Р.Нигмәти. | Р.Нигмәти. «Йәмле Ағиҙел буйҙары» поэмаһы. Поэманың художество үҙенсәлектәре.<br>Т.ү. «Ҡартлас Урал ни күрһә, шуны күргән Ағиҙел». | 2 |
| 11 | М.Кәрим. | М.Кәримдең тормош юлы. «Айгөл иле» драмаһы. Драманың йөкмәткеһе, темаһы, идеяһы. «Шағир шатлығы»,«Ап-аҡ мөғжизә». | 3 |
| 12 | М.Шолохов. | «Кеше яҙмышы» | 1 |
| 13 | Ғ.Хөсәйенов | «Һуңғы тарпан». Хикәйәттең идея- тематик йөкмәткеһе. | 2 |
| 14 | Я.Хамматов | «Ғәйзулла» | 1 |
| 15 | Р.Өмөтбаев. | Р.Өмөтбаевтың тормошо. «Атлы башҡорт» повесы. «Атлы башҡорт» повесында батыр яугирҙар һәм ат образы. | 2 |
| 16 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 2 |

8-СЕ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | Тыуған ер һәм батырҙар. | Илем, телем, ерем (шиғырҙар). В.Распутин. "Француз теле дәрестәре".<br>Дини әҙәбиәт. Р.Бикбаев «Хәҙистәр». М.Ямалетдинов «Ҡөрьән сүрәләре».<br>Шафиҡ Әминев – Тамъяни ижады. Ғ.Ибраһимов «Кинйә» романы.<br>Кинйә - халҡыбыҙҙың данлы батыры. Ҡобайырҙар. Әйтештәр.<br>Р. Солтангәрәев. «Осто бөркөт». | 14 |
| 2 | З.Биишева | З.Биишева «Һөнәрсе менән Өйрәнсек».<br>Т.ү. Инша. «Йәшәү бәхете - хеҙмәт аша тыуған шатлыҡта» | 2 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 3 | М.Кәрим. | М.Кәрим. «Ҡайын япрағы тураһында», «Үлмәҫбай», «Россиянмын».<br>Телмәр үҫтереү. «Үлмәҫбай» поэмаһында юмор һәм сатира. | 2 |
| 4 | Р.Ғарипов. | Р.Ғариповтың тормош юлы. “Урал йөрәге”. “Аманат”, “Уйҙарым” ҡобайырҙары.<br>Т.ү Инша. «Тел - милләтте һаҡлаусы ҡорал». | 3 |
| 5 | Р Бикбаев. | Р.Бикбаев. «Башҡортостан бында башлана», «Уралым».<br>«Йүкәләрҙән һығылып бал тама», «Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта». | 2 |
| 6 | Т.Ғиниәтуллин. | Т.Ғиниәтуллин.  «Мәтрүшкә еҫе» хикәйәһе.  «Әсә һәм бала» хикәйәһе.<br>Т. ү.«Әсә күңеле балала,бала күңеле далала» | 3 |
| 7 | Н.Нәжми. | Н.Нәжмиҙең тормош юлы. Шиғырҙарының  идея-тематик йөкмәткеһе. | 2 |
| 8 | Ә.Әминев. | Ә.Әминев.  «Ҡытайгород» әҫәре. Т.ү. Ерен һатҡан- илен һатҡан. | 2 |
| 9 | Р.Камал. | Р.Камал.  «Таня - Таңһылыу» әҫәре. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. | 2 |
| 10 | Үтелгәнде ҡабатлау. | Йомғаҡлау контроль эше. (тест).  Үтелгәнде ҡабатлау. | 2 |

9-СЫ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | Халыҡ ижады | Художестволы әҙәбиәт. Халыҡ ижады. «Урал батыр» эпосы.<br>«Урал батыр» эпосы - рухи ҡомартҡыбыҙ. Тү. Инша. «Урал батыр» эпосында үлем һәм үлемһеҙлек». “Иҙеүкәй менән  Мораҙым “ эпосы. | 5 |
| 2 | Йырауҙар һәм сәсәндәр. | XIV – XVI быуаттар йырауҙары. Сәсәндәр ижады. Ерәнсә сәсән. Ҡобағош менән Аҡмырҙа сәсәндәр. Ҡарас, Байыҡ Айҙар һәм Мәхмүт  сәсәндәр иэжады. | 3 |
| 3 | С.Юлаев. | С.Юлаевтың тормошо һәм яу юлы. Салауат – шағир һәм сәсән. «Бүгәсәүгә ҡушылып…»  ҡобайыры. Тү. «Салауат – халыҡ батыры». | 3 |
| 4 | Боронғо һәм урта быуаттарҙағы ҡулъяҙма әҙәбиәт. | Ҡол Ғәли.  “Йософ вә Зөләйхә”. Дастансылыҡ традициялары (Хәрәзми, Кәтиб, Сәиф Сараи). XVI- XVIII быуаттар прозаһы. “Һуңғы һартай”. Шәжәрәләр.<br>Тажетдин  Ялсығол.“Тарихнамә-и Болғар». «Батыршаның батшаға яҙған хаты». | 5 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 5 | XIX быуатта Башҡортостанда яҙма һәм баҫма әҙәбиәт | Анализ. Урыҫ ғалимдары һәм яҙыусылары ижадында Башҡортостан темаһы.<br>Мәғрифәтселек башланғыстары. Суфый шағирҙар ижады. “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” әҫәре. “Алдар менән Зөһрә” әҫәре. “Буҙйегет”. | 5 |
| 6 | Мәғрифәтселәр ижады | Мифтахетдин Аҡмулланың тормошо һәм ижады. Аҡмулланың мәғрифәтселек ҡараштары. Тү. Инша. «Аҡмулла – яҡтылыҡ йырсыһы».<br>Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың тормошо һәм ижады. “Башҡорттар”.<br>Тарихи-этнографик хеҙмәттәре . «Йәдкәр».<br>Р.Фәхретдиндең тормошо  һәм ижады. “Әсмә”  романы.<br>Сафуан Яҡшығоловтоң тормошо һәм ижады.<br>Фәтхелҡадир Сөләймәнов ижады. “Тимербай ҡурайсы”.<br>М.Ғафуриҙың тормошо һәм башланғыс ижады. Поэзияһының төп мотивтары. «Шағирҙың алтын приискыһында” повесы.<br>Шәйехзада Бабичтың тормошо һәм ижады.<br>Т.ү. “Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде”. | 12 |
| 7 | Үтелгәнде ҡабатлау. | Башҡорт әҙәбиәтенән йомғаҡлау контроль эше (тест).<br>Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, йомғаҡлау. | 2 |

## III. ТЕМАТИК ПЛАНЛАШТЫРЫУ

### 5-СЕ КЛАСС

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Белем бар байлыҡтан да артыҡ. | 4 |
| 2 | Уҡытыусы – ул ҙур исем. | 3 |
| 3 | Килеп етте көҙҙөң алтыны… | 5 |
| 4 | Күңел күрке – тел. | 4 |
| 5 | Китап – юл күрһәтеүсе йондоҙ. | 6 |
| 6 | Халыҡ әйтһә – хаҡ әйтә. | 12 |
| 7 | Боронғонан аманат. | 2 |
| 8 | Килеп етте ҡыштың һыуығы… | 3 |
| 9 | Башҡортостан – тыуған төйәгем | 6 |
| 10 | Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ. | 3 |
| 11 | Изгеләрҙән-изге әсәйҙәр. | 3 |
| 12 | Яҙ килә, яҙ! | 4 |
| 13 | Бер кем дә, бер нәмә лә онотолмай. | 4 |
| 14 | Тәбиғәт ҡосағында. | 6 |
| 15 | Йәмле йәй килде. | 3 |
| 16 | Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте. | 1 |
| | Бөтәһе: | 68 |

### 6-СЫ КЛАСС

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Алтын һуҡмаҡ. | 3 |
| 2 | Уйҙың күрке - тел, телдең күрке - һүҙ. | 2 |

| | | |
|---|---|---|
| 3 | Ил ҡеүәте –икмәктә. | 7 |
| 4 | Халыҡ һүҙен ташлама. | 8 |
| 5 | Уҡытыусы! Ошо исемдән дә юғарыраҡ ниндәй исем бар?! | 5 |
| 6 | Беҙҙең боронғо әҙәбиәтебеҙ. | 4 |
| 7 | Батырҙарҙы яуҙа күп күрҙек, Салауаттай батыр юҡ икән… | 11 |
| 8 | Башҡортостан - гөлбостан. | 3 |
| 9 | Һыҙҙырт,ҡурай,башҡорт моңдарын… | 3 |
| 10 | Әсәй күңеле – тулы ҡояш . | 4 |
| 11 | Яуҙа еңеп ҡайтығыҙ. | 7 |
| 12 | Тәбиғәт донъяһында. | 4 |
| 13 | Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте. | 4 |
| 14 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 3 |
| | Бөтәһе: | 68 |

7-СЕ КЛАСС

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Туған телем. | 2 |
| 2 | Башҡорт халыҡ ижады. | 6 |
| 3 | В.Зефиров | 1 |
| 4 | М.Аҡмулла. | 2 |
| 5 | М.Ғафури. | 2 |
| 6 | Мамин - Сибиряк | 1 |
| 7 | Ш.Бабич. | 2 |
| 8 | Д.Юлтый. | 2 |
| 9 | Һ.Дәүләтшина. | 3 |

| | | |
|---|---|---|
| 10 | Р.Ниғмәти. | 2 |
| 11 | М.Кәрим. | 3 |
| 12 | М.Шолохов. | 1 |
| 13 | Ғ.Хөсәйенов | 2 |
| 14 | Я.Хамматов | 1 |
| 15 | Р.Өмөтбаев. | 2 |
| 16 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 2 |
| | Бөтәһе: | 34 |

8-СЕ КЛАСС

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Илем, телем, ерем. | 1 |
| 2 | В.Распутин. “Француз теле дәрестәре”. | 2 |
| 3 | Шафиҡ Әминев-Тамъяни | 1 |
| 4 | Ҡөрьән тураһында белем | 1 |
| 5 | Р.Бикбаев “Хәҙистәр”, М.Ямалетдинов “Ҡөрьән сүрәләре” | 2 |
| 5 | Ғ.Ибраһимов. «Кинйә» романы | 2 |
| 6 | Б.Бикбай. «Ер» поэмаһы, «Ҡаһым түрә» драмаһы | 2 |
| 7 | Ғ.Сәләм. «Шоңҡар» поэмаһы | 2 |
| 8 | З.Биишева. «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәте | 3 |
| 9 | М.Кәрим. «Йәшәйһе бар» шиғыры, «Үлмәҫбай» поэмаһы | 3 |
| 10 | Р.Ғарипов. «Урал йөрәге», «Аманат», «Уйҙарым» ҡобайырҙары | 2 |
| 11 | Н.Мусин. «Йыртҡыс тиреһе» повесынан өҙөк | 2 |
| 12 | Ғ.Хөсәйенов. «Һуңғы тарпан» хикәйәте | 2 |
| 13 | Р.Бикбаев шиғырҙары. | 1 |
| 14 | Т.Ғиниәтуллин. «Мәтрүшкә еҫе», «Әсә һәм бала» хикәйәләре | 3 |
| 15 | Ә.Әминев. «Ҡытайгород» | 3 |
| 16 | Р.Камал. «Таня-Таңһылыу» повесынан өҙөк | 2 |

| | | |
|---|---|---|
| 17 | Үтелгәнде ҡабатлау | 1 |
| | Бөтәһе: | 34 |

## 9-СЫ КЛАСС

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Башҡорт халыҡ эпосы йәки ҡобайырҙар. | 7 |
| 2 | Йырауҙар һәм сәсәндәр ижады. | 3 |
| 3 | Салауат Юлаев. | 4 |
| 4 | XVIII – XIX быуат әҙәбиәте. | 1 |
| 5 | М. Аҡмулла. | 3 |
| 6 | М.Өмөтбаев. | 2 |
| 7 | Сафуан Яҡшығолов. | 1 |
| 8 | Р.Фәхретдинов. | 2 |
| 9 | Мәжит Ғафури. | 3 |
| 10 | Ф.Сөләймәнов ижады һәм тормош юлы. | 2 |
| 11 | Ш.Бабич ижады. | 2 |
| | Бөтәһе: | 34 |